Муниципальное бюджетное общеобразовательное учреждение
«Основная общеобразовательная школа с .Свобода
Муниципального района Куюргазинский район Республики Башкортостан»

**Утверждаю**
Директор МБОУ ООШ с.Свобода
------------------Г.А.Акберова

Приказ №50/1 от 01.09.2020 г.

# Рабочая программа по башкирскому языку

**4 класс**

**2020-2021 уч. г.**

**Рабочая программа составлена на основании: Авторской программы по башкирскому языку для 4 класса.**

**Учебник. М.С.Давлетшина,Н.Н.Кинзябаева,Г.М. Садыкова.Башкирский язык.4 класс.Уфа.Китап.**

Сканировано с CamScanner

## Аңлатма яҙыу

Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған "Башҡорт теленән программа" (Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I-XI кластары өсөн) нигеҙендә төҙөлдө. Төҙөүселәре Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М.С., Ғәбитова З.М., Усманова М.Г. - Ижевск: Книгоград, 2008.

Аҙнаһына 1 сәғәт бүленгән, йылына 34 сәғәт тура килә.

Уҡыу-методик әсбаптар исемлеге

***Уҡытыусы өсөн:***

1.Дәүләтшина ,М.С. Башҡорт теле : уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 4-се класы өсөн башҡорт телен (дәүләт теле буларак) өйрәнеү өсөн дәреслек/ М.С. Дәүләтшина, Н.Н.Кинйәбаева, Г.М.Садыкова .-Өфө: Китап, 2016

2. Башҡорт теленән изложение текстары йыйынтығы. 1- 4 - се класс уҡытыусылары өсөн ҡулланма– Өфө : Китап, 2009

3. Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М. С., Сиразетдинов З. Ә. Башҡортса өйрәнәйек. Урыҫ мәктәптәренең 1-4 – се синыфтары өсөн башҡорт теленән электрон дәреслек. – Өфө: Мәғариф министрлығы, 2009

4. Ял минуттары өсөн күнегеүҙәр. Методик ҡулланма. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2009.

***Уҡыусы өсөн:***

1.Дәүләтшина ,М.С. Башҡорт теле : уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 4-се класы өсөн башҡорт телен (дәүләт теле буларак) өйрәнеү өсөн дәреслек/ М.С. Дәүләтшина, Н.Н.Кинйәбаева, Г.М.Садыкова .-Өфө: Китап, 2016

2.Урахсин З. Г., Сиразетдинов З. Ә., Суфьянова Н. Ф. Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге.: Башланғыс синыф уҡыусылары өсөн. - Өфө : Китап, 2009

3.Башкирско-русский, русско-башкирский. Учебный словарь. Усманова М.Г., Саяхова Л.Г., Киньягулова З.И.-Уфа, 2009

Башланғыс кластарҙа башҡорт телен дәүләт теле буларак уҡытыуҙың интегратив маҡсатын уҡыусыла элементар коммуникатив компетенция формалаштырыу тәшкил итә.

Элементар коммуникатив компетенция – уҡыусының типик ситуацияларҙа телдән һәм яҙма рәүештә башҡорт теле саралары ярҙамында аралашыуға әҙерлеге һәм һәләте. Шулай итеп, башланғыс кластарҙа башҡорт телен уҡытыуҙың түбәндәге **маҡсаттарын** билдәләп була:

- башланғыс класс уҡыусыһының телмәр мөмкинлектәрен һәм ихтыяждарын иҫәпкә алып телдән (тыңлап аңлау һәм һөйләү) һәм яҙма (уҡыу һәм яҙыу) рәүештә аралашыу оҫталығын формалаштырыу;
- уҡыусыларҙы башҡорт балалар фольклоры һәм нәфис әҙәбиәт үрнәктәре менән таныштырыу; башҡа милләт вәкилдәренә ҡарата ихтирам тәрбиәләү;



Сканировано с CamScanner

- башланғыс класс уҡыусыларының телмәр, интеллектуаль һәм танып белеү һәләтен һәм уҡыу оҫталығын үҫтереү; башҡорт телен артабан үҙләштереүгә мотивация булдырыу;
- башҡорт теле саралары ярҙамында уҡыусыны тәрбиәләү һәм уның төрлө яҡлы үҫешенә булышлыҡ итеү;
- 3 класта үҙләштерелгән диалогик, монологик телмәр күнекмәләрен камиллаштырыу;
- һорау биреү, һорауҙарға үҙ һүҙҙәре менән яуап биреү;

һүҙлек һүҙҙәрен үҙләштереү, һүҙ байлығын арттырыу;

- текст менән эшләү күнекмәләрен үҫтереү;
- программаға ярашлы грамматик материалды үҙләштереү;
- тыуған төйәк, кешенең һәйбәт сифаттары хағында әҫәрҙәр уҡыу.

«Башҡорт теле» предметының эшмәкәрлекле характеры донъяны бөтөн, эмоциональ һәм актив ҡабул итеүсе башланғыс класс уҡыусыһының тәбиғәтенә тап килә.

**Уҡыу предметының дөйөм характеристикаһы.**

Башҡорт булмаған балаларға телде өйрәтеүҙең дөйөм характеристикаһы түбәндәгеләргә ҡайтып ҡала:

-һүҙҙәр менән эш: әҙәби текста, диалогтарҙа яңы һүҙҙәргә аңлатма биреү, һүҙҙәрҙе тематик принципта туплау һәм аңлатыу, һүҙҙәрҙе һөйләмдә, телмәрҙә ҡулланыу аша аңлатыу;

-фонетика, грамматика һәм телмәр үҫтереү: өндәр һәм хәрефтәр,һуҙынҡылар һәм тартынҡылар,һүҙҙең фонетик төҙөлөшө,уның ижектәргә бүленеше, баҫым үҙенсәлектәре,һүҙ төркөмдәре, уларҙың үҙгәреше, башҡорт телендә һөйләм төҙөлөшө, унда һөйләм киҫәктәренең урынлашыу тәртибе;

-бәйләнешле телмәр үҫтереү: балаларҙы башҡортса һөйләшергә өйрәтеү

тел менән әҙәби материалдары бергә ҡушып өйрәтеү (интеграция);

-лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәтеү (коммуникатив йүнәлеш).

**Уҡыу предметы йөкмәткеһенең дөйөм ҡиммәттәргә ориентацияһы (йүнәлеше)**

Башланғыс мәктәптә башҡорт телен өйрәнгәндә уҡыусыларҙың дөйөм телмәр үҫеше стимуляциялана; коммуникатив мәҙәниәте үҫә; дөйөм ҡиммәттәргә ориентацияһы формалаша һәм дәрестә аралашыу процесында, балалар фольклоры үрнәктәре һәм текстар менән танышҡанда әхләҡи тәрбиә нигеҙҙәре барлыҡҡа килә; сит мәҙәниәткә ҡарата толерантлыҡ формалаша.

**Уҡыу предметын өйрәнеүҙең шәхси ,метапредмет, предмет һөҙөмтәләре.**

Башҡорт телен башлангыс кластарҙа өйрәнеүҙең **шәхси һөҙөмтәләренә** түбәндәгеләр инә: донъяны күп телле һәм мәҙәниәтле йәмғиәт булараҡ ҡабул итеү; үҙендә илдең гражданины итеп тойоу;телде (шул иҫәптән башҡорт телен) төп аралашыу сараһы булараҡ ҡабул итеү; башҡорт теле саралары ярҙамында (балалар фольклоры, балалар әҙәбиәтенең ҡайһы бер үрнәктәре) уҡыусының башҡорт халҡының тормошо менән танышыуы.



Сканировано с CamScanner

- башланғыс класс уҡыусыларының телмәр, интеллектуаль һәм танып белеү һәләтен һәм уҡыу оҫталығын үҫтереү; башҡорт телен артабан үҙләштереүгә мотивация булдырыу;
- башҡорт теле саралары ярҙамында уҡыусыны тәрбиәләү һәм уның төрлө яҡлы үҫешенә булышлыҡ итеү;
- 3 класта үҙләштерелгән диалогик, монологик телмәр күнекмәләрен камиллаштырыу;
- һорау биреү, һорауҙарға үҙ һүҙҙәре менән яуап биреү;

һүҙлек һүҙҙәрен үҙләштереү, һүҙ байлығын арттырыу;

- текст менән эшләү күнекмәләрен үҫтереү;
- программаға ярашлы грамматик материалды үҙләштереү;
- тыуған төйәк, кешенең һәйбәт сифаттары хағында әҫәрҙәр уҡыу.

«Башҡорт теле» предметының эшмәкәрлекле характеры донъяны бөтөн, эмоциональ һәм актив ҡабул итеүсе башланғыс класс уҡыусыһының тәбиғәтенә тап килә.

## Уҡыу предметының дөйөм характеристикаһы.

Башҡорт булмаған балаларға телде өйрәтеүҙең дөйөм характеристикаһы түбәндәгеләргә ҡайтып ҡала:

-һүҙҙәр менән эш: әҙәби текста, диалогтарҙа яңы һүҙҙәргә аңлатма биреү, һүҙҙәрҙе тематик принципта туплау һәм аңлатыу, һүҙҙәрҙе һәйләмдә, телмәрҙә ҡулланыу аша аңлатыу;

-фонетика, грамматика һәм телмәр үҫтереү: өндәр һәм хәрефтәр,һуҙынҡылар һәм тартынҡылар,һүҙҙең фонетик төҙөлөшө,уның ижектәргә бүленеше, баҫым үҙенсәлектәре,һүҙ төркөмдәре, уларҙың үҙгәреше, башҡорт телендә һөйләм төҙөлөшө, унда һөйләм киҫәктәренең урынлашыу тәртибе;

-бәйләнешле телмәр үҫтереү: балаларҙы башҡортса һөйләшергә өйрәтеү тел менән әҙәби материалдары бергә ҡушып өйрәтеү (интеграция);

-лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәтеү (коммуникатив йүнәлеш).

## Уҡыу предметы йөкмәткеһенең дөйөм ҡимммәттәргә ориентацияһы (йүнәлеше)

Башланғыс мәктәптә башҡорт телен өйрәнгәндә уҡыусыларҙың дөйөм телмәр үҫеше стимуляциялана; коммуникатив мәҙәниәте үҫә; дөйөм ҡиммәттәргә ориентацияһы формалаша һәм дәрестә аралашыу процесында, балалар фольклоры үрнәктәре һәм текстар менән танышҡанда әхләҡи тәрбиә нигеҙҙәре барлыҡҡа килә; сит мәҙәниәткә ҡарата толерантлыҡ формалаша.

## Уҡыу предметын өйрәнеүҙең шәхси ,метапредмет, предмет һөҙөмтәләре.

Башҡорт телен башланғыс кластарҙа өйрәнеүҙең **шәхси һөҙөмтәләренә** түбәндәгеләр инә: донъяны күп телле һәм мәҙәниәтле йәмғиәт булараҡ ҡабул итеү; үҙеңде илдең гражданины итеп тойоу;телде (шул иҫәптән башҡорт телен) төп аралашыу сараһы булараҡ ҡабул итеү; башҡорт теле саралары ярҙамында (балалар фольклоры, балалар әҙәбиәтенең ҡайһы бер үрнәктәре) уҡыусының башҡорт халҡының тормошо менән танышыуы.



Сканировано с CamScanner

**Метапредмет һөҙөмтәләр:**

– уҡыусының коммуникатив һәләттәрен үҫтереү; элементар коммуникатив мәсьәләне сисеү өсөн адекват тел һәм телмәр сараларын һайлау һәләтен үҫтереү;

– башланғыс класс уҡыусыһының танып белеү һәм эмоциональ сфераларын үҫтереү; башҡорт телен өйрәнеүгә мотивация булдырыу;

– уҡытыу-методик комплекстың төрлө компоненттары (дәреслек, аудиодиск һ.б.) менән эшләргә өйрәтеү.

**һөҙөмтәләре:** башҡорт теле нормалары (фонетик, лексик, грамматик) тураһында башланғыс белешмә; (курс йөкмәткеһе кимәлендә) өн, хәреф, һүҙ кеүек тел берәмектәрен табыу һәм сағыштырыу һәләте.

**А.** Коммуникатив сферала (башҡорт телен аралашыу сараһы булараҡ өйрәнеүҙә)

Телмәр эшмәкәрлегенең түбәндәге төрҙәрендә телмәр компетенцияһы:

һөйләү телмәрендә:

- аралашыуҙың типик ситуацияларында элементар этикет диалог алып барыу;

- элементар кимәлдә уҡыусының үҙе, ғаиләһе, дуҫы тураһында һөйләүе; предмет, картинаны һүрәтләүе; персонажды ҡыҫҡаса ҡылыҡһырлауы;

тыңлап аңлауҙа:

- уҡыусының уҡытыусы һәм класташтарының телмәрен тыңлап аңлауы; аудиояҙмаларҙағы ҙур булмаған текстарҙың йөкмәткеһен аңлауы;

уҡыуҙа:

- өйрәнелгән тел материалына таянып төҙөлгән ҙур булмаған текстарҙы ҡысҡырып уҡыу;
- өйрәнелгән тел материалы менән бер рәттән яңы һүҙҙәрҙе лә үҙ эсенә алған текстарҙы эстән уҡыу һәм уларҙың төп йөкмәткеһен аңлау, текстан кәрәкле информацияны табыу;

яҙма телмәрҙә:

- яҙыу техникаһына эйә булыу;
- үрнәк буйынса байрам менән ҡотлау һәм ҡыҫҡа шәхси хат яҙыу.

Тел компетенцияһы (тел сараларын үҙләштереү).

- башҡорт теленең өндәрен дөрөҫ әйтеү һәм айырыу; һүҙҙәргә һәм фразаларға дөрөҫ баҫым ҡуйыу;
- төрлө һөйләм төрҙәрен интонация менән уҡыу;
- башланғыс мәктәп курсында өйрәнелгән уҡыу һәм орфографик ҡағиҙәләрҙе ҡулланыу;
- башланғыс мәктәп курсында өйрәнелгән лексик берәмектәрҙе (һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, баһалау лексикаһы, телмәр клишелары) һәм грамматик күренештәрҙе таныу һәм телмәрҙә ҡулланыу.

Социомәҙәни компетенция.



Сканировано с CamScanner

- географик атамаларҙы, билдәле балалар әҫәрҙәренең персонаждарын, популяр әкиәттәрҙең сюжеттарын, балалар фольклорының ҙур булмаған әҫәрҙәрен (шиғырҙар, йырҙар) белеү;

**Б.** Танып белеү сфераһы:

- айырым өндәр, хәрефтәр, һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, ябай һөйләмдәр кимәлендә башҡорт һәм рус телдәренең күренештәрен сағыштыра белеү;
- башланғыс мәктәп тематикаһы кимәлендә өлгө буйынса күнегеүҙәр эшләй белеү;
- ҡағиҙәләр, таблицаларҙы ҡуллана белеү;
- үҙ-үҙеңде башланғыс класс уҡыусыһы кимәлендә баһалай белеү;

**В.** Дөйөм ҡиммәттәргә йүнәлеш сфераһында:

- башҡорт телен фекер, хис-тойғо, эмоцияларҙы белдереү сараһы булараҡ ҡабул итеү;
- балалар фольклоры ярҙамында башҡорт халҡының рухи ҡиммәттәрен үҙләштереү.

**Г.** Эстетик сферала:

- башҡорт телендәге хис-тойғо һәм эмоцияларҙы белдереүсе сараларҙы үҙләштереү;
- балалар әҙәбиәте үрнәктәре менән танышҡанда матурлыҡты танырға өйрәнеү.

**Д.** Хеҙмәт сфераһында:

- уҡыу процесында билдәләнгән планға ярашлы эшләй белеү.

*Төп йөкмәтке линиялары.*

Башҡорт теле курсында түбәндәге йөкмәтке линияларын билдәләп була:

- телмәр эшмәкәрлегенең төп төрҙәрендә коммуникатив оҫталыҡтар;
- тел саралары һәм уларҙы ҡулланыу күнекмәләре;
- социомәҙәни компетенция;
- дөйөм уҡыу һәм махсус уҡыу оҫталыҡтары.

**Коммуникатив оҫталыҡтар.**

**Һөйләү телмәре**

1. Диалогик форма:

- типик ситуацияларҙа диалог алып барыу;
- һорау-яуап рәүешендәге диалог.

2. Монологик форма:

- телмәрҙең төп коммуникатив төрҙәрен (тасуирлау, хикәйәләү, ҡылыҡһырлау) ҡулланыу.

**Тыңлап аңлау**

- уҡыусының уҡытыусы һәм класташтарының телмәрен аңлауы;
- өйрәнелгән тел материалына таянып эшләнгән аудиояҙмалағы ҙур булмаған текстарҙы аңлау.

**Уҡыу**



Сканировано с CamScanner

- башҡорт теле материалына таянып эшләнгән ҙур булмаған текстарҙы ҡысҡырып уҡыу;
- өйрәнелгән материалды һәм бер нисә яңы һүҙҙе үҙ эсенә алған тексты эстән уҡыу һәм аңлау, текстан кәрәкле информацияны табыу (персонаждарҙың исемдәре, географик атамалар һ.б.).

**Яҙыу**

- текстан һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр һәм һөйләмдәрҙе күсереп яҙыу оҫталығы;
- яҙма телмәр нигеҙҙәре: байрам менән ҡотлау, ҡыҫҡа шәхси хат яҙыу.

**Тел саралары һәм уларҙы ҡулланыу күнекмәләре.**

1. Графика, каллиграфия, орфография.

Башҡорт теленең алфавиты. Йы, йе, йө, йү, йә ҡушымсалары. Өн һәм хәрефтең тап килеүе. Уҡыу ҡағиҙәләре. Төп орфографик ҡағиҙәләр. Һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы.

2. Телмәрҙең фонетик яғы.

Башҡорт теленең специфик өндәрен дөрөҫ әйтеү һәм ишетеү. Төп орфоэпик нормалар. Башҡорт телендә баҫым. Һөйләмдең интонацион төрҙәре.

3. Телмәрҙең лексик яғы.

Лексик берәмектәрҙе ике яҡлы (рецептив һәм продуктив) үҙләштереү, тотороҡло һүҙбәйләнештәр, телмәр этикеты элементтары булараҡ баһалау лексикаһы һәм телмәр клишелары. Интернациональ һүҙҙәр. Һүҙьяһалыш.

4. Телмәрҙең грамматик яғы.

Һөйләмдең төп коммуникатив төрҙәре: хәбәр, һорау, өндәү. Һорау алмаштары. Һөйләмдә һүҙ тәртибе. Раҫлау һәм инҡар итеү һөйләмдәре. Хәбәре ҡылым, исем һәм ҡушма ҡушма ҡылым менән белдерелгән ябай һөйләм. Раҫлау йәки инҡар итеү мәғәнәһен белдергән өндәү һөйләмдәр. Эйәһеҙ һөйләм. Хәҙерге заман формаһы. Ябай тарҡау һөйләм. Тиң киҫәкле һөйләмдәр. *Һәм, ләкин* теркәүестәре менән бирелгән теҙмә ҡушма һөйләмдәр. *Сөнки* бәйләүесе менән бирелгән эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр. Инфинитив (уртаҡ ҡылым). Мөмкин, тейеш, кәрәк модаль һүҙҙәре. Исемдәрҙең һан һәм килеш менән үҙгәреше.

Сифат дәрәжәләре.

Алмаш һәм уның төрҙәре (зат, һорау, эйәлек, күрһәтеү).

Ваҡыт рәүештәре (кисә, бөгөн, иртәгә, йыш һ.б).

100-гә тиклем төп һандар, 30-ға тиклем рәт һандары.

Уҡыусыларҙың әҙерлегенә талаптар.

5.Уҡығанды, һөйләгәнде аңлау, йөкмәтке буйынса һорауҙар, һәм шул һорауҙарға яуап бирә белеү;

Прозаик текстарҙы дөрөҫ, шыма, аңлы уҡыу белеү;

Уҡылған тексты өлөштәргә бүлеү,исем биреү, элементар план төҙеү;

Текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табыу, һүҙлектәрҙе файҙаланыу;

Башҡортостан тураһында мәғлүмәттәргә эйә булыу;

Башҡорт халҡының мәҡәлдәре, йомаҡтарын белеү;



Сканировано с CamScanner

Хәрефтәрҙе һәм һүҙҙәрҙе матур , дөрөҫ яҙа белеү;
Өйрәтеү диктанттар яҙа белеү.
6.Универсаль уҡыу күнекмәләре.
Уларға түбәндәгеләр инә:
башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;
һорауҙарға яҙма яуаптар ;
тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар төҙөү.

**3.**Уҡыу - тематик планы.

| № | Бүлек исемлеге, темалар | Сәғәттәр һаны | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|
| 1. | Көндә мәктәпкә барам | 7 | |
| 2. | Минең ғаиләләмде яратам | 6 | |
| 3. | Үҙем йәшәгән ер тураһында һөйләйем | 5 | |
| 4. | Ауылда /ҡалала йәшәйем | 6 | |
| 5. | Йыл миҙгелдәре һәм һауа торошо тураһында һөйләшәбеҙ | 3 | |
| 6. | Төрлө хәлдәр тураһында һөйләшәбеҙ. | 2 | |
| 7. | Һатып алырға өйрәнәм | 5 | |
| | Бөтәһе: | 34 сәғәт | |

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе**

1. **Көндә мәктәпкә барам (7 с.)** 3-се класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау.Башҡорт теленең үҙенсәлекле өн һәм хәрефтәре .Белем алыу, уҡыу темаһына ҡағылышлы һүҙҙәрҙе белеү, грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Иҫәнләшеү. Танышыу диалогы. Һин ҡайҙан? Һиңә нисә йәш? Һинең туғандарың бармы? (Сәнғәтле һөйләшеү.) Уҡыу эшмәкәрлеге, уҡыу әсбаптары, уларҙы бөхтә тотоу. Көн режимы,таҙалыҡ, йыйнаҡлыҡ. Класта дуҫлыҡ, берҙәмлек тураһында һөйләшеүҙәр,әҫәрҙәр уҡыу.Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре һәм хәрефтәре . Башҡорт телендә исем. Уның аңлатҡан мәғәнәләре. Берлек һәм күплек мәғәнәләре. Шул мәғәнәләрҙе белдереүсе саралар(ялғауҙар). Әҫәрҙең темаһын төп фекерен билдәләү күнекмәләре Һөйләм. Һөйләм төрҙәре. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе.
2. **Минең ғаиләләмде яратам (6с.)** Ғаилә ағҙалары, уларҙың үҙеңә туғанлыҡ мөнәсәбәттәре. Был атамаларҙы үҙләштереү. Темаға бәйләнешле яҡындарҙың эш-шөғөлдәре, уй-хыялдары, киләсәккә пландары. Ғаилә шәжәрәһе. Сифат.



Сканировано с CamScanner

Антонимдар.Сифат дәрәжәләре .Сифаттың дәрәжә менән үҙгәрешен практик күҙәтеү .Сифаттарҙың дөрөҫ яҙылышы.

**3.Үҙем йәшәгән ер тураһында һөйләйем(5с.)** Йәшәгән Ер, йорт/район. Был атамаларҙы үҙләштереү .Күршеләр,яраткан урындар темаһына ҡағылышлы һүҙҙәрҙе белеү. Алмаш . Зат алмаштарын практик ҡулланырға өйрәтеү. Текстан кәрәкле урындарҙы һайлап уҡыу. Иптәшең йәки үҙең яҙғандарҙы камиллаштырыу өҫтөндә эште дауам итеү.Күрһәтеү алмаштары. Эйәлек заты алмаштары.

**4.Ауылда /ҡалала йәшәйем(6 с.)** Тыуған ауыл/ҡала.Ауыл/ҡала тормошо. Ҡалалағы һәм ауылдағы эштәр. Башҡортостандың ҡалалары һәм ауылдары. Тыуған ер мөғжизәләре .Был атамаларҙы үҙләштереү. Башҡортостандың ҡалалары тураһында әҫәрҙәр уҡыу, белешмәләр алыу һәм һөйләү. Һан һәм уның төркөмсәләрен практик үҙләштереү. Цифрҙар менән бирелгән һандарҙы һәм уларҙың ялғауҙарын дөрөҫ яҙыу күнекмәләре биреү. Автобиографияны һөйләү һәм яҙыу күнекмәләрен формалаштырыу.

**5.Йыл миҙгелдәре һәм һауа торошо тураһында һөйләшәбеҙ.(3с.)** Кеше һәм тәбиғәт. Башҡортостан тәбиғәте. Беҙҙә йәшәгән кейектәр, үҫемлектәр, бөжәктәр. Кешенең уларға мөнәсәбәте. Йыл миҙгелдәре. Тәбиғәттең төрлө күренештәре. Миҙгелдәргә ярашлы балаларҙың эштәре, уйындары тураһында һөйләшеүҙәр, әҫәрҙәр уҡыу, мәҡәлдәр, һынамыштар менән танышыу. Рәүеш . Рәүеш аңлатҡан мәғәнәләрҙе практик үҙләштереү.

**6.Төрлө хәлдәр тураһында һөйләшәбеҙ (2с.)**

Балалар тормошондағы ҡыҙыҡлы хәлдәр, хыялдары, кумирҙары тураһында һөйләшеүҙәр, әҫәрҙәр уҡыу.Мажаралар илендә. Ҡылым. Уның зат, һан, заман, барлыҡ-юҡлыҡ мәғәнәләре. Текстан образлылыҡ сараларын һайлап ала белеү һәм уларҙы ҡулланыу. Иптәшендең яҙғанын тикшереү һәм камиллаштырыу күнекмәләре.

**8 .Һатып алырға өйрәнәм(5с.)** Бюджет.Кейем исемдәрен үҙләштереү, элек өйрәнгәндәрҙе иҫкә төшөрөү. Кейемде һаҡлап, ҡәҙерләп тотоу, һәр береһен үҙ урынына ҡуйыу. Кейем һәм шәхси гигиена. Кейем һәм матурлыҡ, тыйнаҡлыҡ тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Йыл буйына үтелгәндәрҙе ҡабатлау, белемдәрҙе системалаштырыу.

**5. Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар.**

1. Һөйләгәнде йәки уҡығанды аңлай алыу (аудирование):

уҡытыусының, иптәшенең һөйләгәнен, уҡығанын аңлай алыу;

иҫәнләшеү, һаубуллашыу, рәхмәт әйтеү, ғәфү үтенеү, үтенесте белдереү, рөхсәт һорау (телмәр этикеты);

тексттың йөкмәткеһе, ситуация буйынса һорау биреү.

2. Уҡыған текст буйынса, күҙәтеүҙәр нигеҙендә һөйләй белеү, ситуацияға ярашлы һөйләшеү (говорение):

бәләкәй күләмле тексттың йөкмәткеһен һөйләү,

һүҙлек һүҙҙәрен белеү, уларҙы дөрөҫҡулланып һөйләү,

диалог төҙөү, төркөмдәрҙә һөйләшеү,



Сканировано с CamScanner

үҙен, ғаилә ағзалары, уларҙың исемдәрен белеү, һөнәр-шөғөлдәре, туғанлыҡ мөнәсәбәте h.б. тураһында һөйләү,
ваҡиғаға, персонажға үҙ мөнәсәбәтеңде әйтеп биреү,
башҡорт теленән русаға һәм киреһенсә тәржемә итеү.
3. Уҡыу (чтение):
тексты дөрөҫ, шыма, талғын уҡыу (орфоэпик нормалар нигеҙендә),
поэтик әҫәрҙәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу,
уҡыған тексттың йөкмәткеһен билдәләй алыу, персонаждарын әйтеү,
текстан һорауҙарға яуаптар табыу, уҡып күрһәтеү.
4. Яҙыу (письмо):
хәрефтәрҙе матур, дөрөҫ, тейешле кимәлдә тоташтырып яҙыу,
ҙур булмаған тексты күсереп яҙыу,
шундай уҡ текст буйынса йә картина нигеҙендә 2-3 һорауға яуап яҙыу,
бирелгән ситуация буйынса 2-3 һөйләмдән торған текст яҙыу.

**Башҡорт (дәүләт) теленән календарь – тематик планлаштырыу**
**4 класс, йылына – 34 сәғәт (аҙнаға 1 сәғәт иҫәбенән)**

| Темалар | | | Дата | |
|---|---|---|---|---|
| № | лексик | грамматик | план | факт. |
| 1 | **Көндә мәктәпкә барам (7 с.)** 1сентябрь –Белем көнө. | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау | | |
| 2 | Мин мәктәпкә ни өсөн йөрөйөм? Мин ниндәй дәресте яратам /яратмайым? | Һөйләм Һөйләм төрҙәре. | | |
| 3 | Мин нимә уҡырға яратам? | Исем. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр | | |
| 4 | Мәктәптәге дуҫтарым менән таныштырайыммы? | Предметты белдереүсе һүҙҙәрҙең берлек, күплек формаһы | | |
| 5 | ***Контроль күсереү №1«Тоҫло япраҡтар»*** | Үтелгәнде ҡабатлау | | |
| 6 | *Хаталар өҫтөндә эш.* Беҙ мәктәптә нимә тураһында һөйләшәбеҙ? | Хаталарҙы аңлата белеү Предметты белдереүсе һүҙҙәрҙең берлек, күплек формаһы | | |
| 7 | "Көндә мәктәпкә барам" темаһы буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау, нығытыу. Б.т.у.һүрәттәр буйынса хикәйә төҙөү | Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе | | |



Сканировано с CamScanner

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 8 | **Минең ғаиләмде яратам (6с.)** Беҙгә бирелгән күцелле | Сифат | | |
| 9 | Мин тәрбиәле бала | Сифат | | |
| 10 | Минең өйҙәге бурыстарым | Сифат. Антонимдар | | |
| 11 | Минең яратҡан шөғөлөм. | Сифат дәрәжәләре | | |
| 12 | Мин йәшәгән бүлмә | Сифаттарҙың дөрөҫ яҙылышы | | |
| 13 | Минең кескәй дуҫтарым | Сифат | | |
| 14 | **Үҙем йәшәгән ер тураһында һөйләйем(5 с.)** Мин йәшәгән Ер.Мин йәшәгән йорт/район. | Алмаш. Күрһәтеү алмаштары | | |
| 15 | Минең күршеләрем | Эйәлек заты алмаштары. | | |
| 16 | ***Контроль күсереү №2«Ауылым тәбиғәте»*** | Үтелгәнде ҡабатлау | | |
| 17 | *Хаталар өҫтөндә эш.* Беҙҙең уйындарыбыҙ. Мин яратҡан урындар | *Хаталарҙы аңлата белеү* Алмаш. | | |
| 18 | **Ауылда /ҡалала йәшәйем (6 с.)** Минең тыуған ауылым /ҡалам | Һан | | |
| 19 | Ауыл/ҡала тормошо | Һан төркөмсәләре | | |
| 20 | Ҡалалағы һәм ауылдағы эштәр | Һан | | |
| 21 | Башҡортостандың ҡалалары һәм ауылдары | Ябай һәм ҡушма һандар. | | |
| 22 | Тыуған ерем мөғжизәләре | Ябай һәм ҡушма һандар. | | |
| 23 | Тема буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау, нығытыу. Б.т.ү.Карта менән эш | Үтелгән лексик-грамматик теманы ҡабатлау | | |
| 24 | **Йыл миҙгелдәре һәм һауа торошо тураһында һөйләшәбеҙ. (3с.)** Йыл миҙгелдәре ниңә үҙгәрә? Йәнлектәр йыл миҙгелдәрен беләме? | Рәүеш | | |
| 25 | Бөжәктәр нисек йәшәй? Һауа торошон белеү ниңә кәрәк? | Үтелгән лексик -грамматик теманы ҡабатлау | | |
| 26 | **Контроль диктант №1. " Терпе"** | Үтелгән лексик- грамматик теманы | | |



Сканировано с CamScanner

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | | ҡабатлау | | |
| 27 | *Хаталар өҫтөндә эш* | *Хаталарҙы аңлата белеү* | | |
| 28 | **Төрлө хәлдәр тураһында һөйләшәбеҙ (2с.)**<br>Минең тормошомдағы ҡыҙыҡ-лы хәлдәр.<br>Мажаралар илендә. | Ҡылым.Юҡлыҡ фор-маһы. | | |
| 29 | Минең иң ҙур хыялым.<br>Минең кумирҙарым. | Ҡылым заты, һаны. | | |
| 30 | **Һатып алырға өйрәнәм(5с.)**<br>Минең бюджет | Ҡылым. Этикет формалары | | |
| 31 | Мин кейем һатып алам. | Ҡылым.Заман формалары. | | |
| 32 | Мин модалы кейем яратам. | Ҡылым.Заман формалары. | | |
| 33 | Бүләк һайлайым. | Үтелгән лексик-грамматик материалды ҡабатлау | | |
| 34 | Йыл буйына үтелгәндәрҙе ҡабатлау, белемдәрҙе системалаштырыу.Тест | Башҡорт телендә һөйләм төҙөлөшө. | | |



Сканировано с CamScanner